Разия ХОЖАЙҒОЛОВА

# БӘХЕТЛЕ ЯҘМЫШ

Кеше яҙмышы... Ниндәй ҙә булһа бер шәхес тураһында яҙырға ҡулыма ҡәләм алһам, бала саҡтан инде күңелгә һеңеп ҡалған, ҡолаҡта сыңлап торған халыҡ әйтеме мейене сыйып үтә: "Кеше был донъяға үҙ яҙмышы менән тыуа. Маңлайына ни яҙылһа, шуны күрмәйенсә был донъянан китә лә алмай". Быны мин дәлилләй ҙә, инҡар ҙа итә алмайым. Тәү ҡарашҡа, һәр кем үҙ яҙмышын үҙе ҡора кеүек. Икенсенән, матурлыҡҡа, яҡшылыҡҡа ынтылыу — үҙе үк Хоҙай тарафынан бирелгән ҡиммәтле бүләк түгелме ни?.. Ошондай сифаттар һиңә бирелгән икән, уны исраф итмәйенсә, тыуған ереңә, һине уратып алған донъяға таратыу — изге бурыс. Ваҡыт үтеү менән аллы-гөллө сәскәләргә күмелгән йәшел болонлоҡҡа килеп сығыуың, унан кинәнес, күңел йыуанысы алыуың, йәйғор нурҙарына ҡойоноуың — үҙе бер бәхет, бер табыш, бер тамаша!..



*А.Островский. «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр». Дудукин — З.Вәлитов, Коринкина — Э.Юнысова*

Минең бөгөнгө һүҙем дә нәк ошондай сифаттарға эйә булған олуғ шәхес, Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына бар ғүмерен арнаған Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Заһир Суфиян улы Вәлитов хаҡында. Күгәрсен районының иң киткес хозур тәбиғәтле Вәлит ауылында тыуып, Норбутта бала сағы үткән, Йомағужала урта мәктәптә белем алған, тәбиғәте, булмышы менән тыныс, итәғәтле, сабыр, ғәжәйеп киң күңелле Заһир Суфиян улы, бер-беренә бөтөнләй оҡшамаған йөҙҙәрсә яҙмыштарҙы сәхнәлә сағылдырып, геройҙарҙың әрнеү-һыҡрауҙарын, шатлыҡтарын, хыялдарын, табыштарын, юғалтыуҙарын йөрәге аша үткәргән, шул уҡ ваҡытта үҙе булып ҡала белгән, ғүмеренең алтмыш бишенсе көҙөнә аяҡ баҫҡан ир-уҙаман, бөгөнгө көндә лә сәнғәткә арымай-талмай хеҙмәт итә.

Сәхнәгә ул урау юлдар менән килеп инә. Ауыл хужалығы институтына имтихандар тапшырырға юлланған егет, бар ауылдаштарын хайран ҡалдырып, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә. Тәбиғәте менән аҙ һүҙле, баҫалҡы егеттең был ҡылығына ауылдаштары аптырамаҫлыҡмы ни? ”Унан ниндәй артист сыҡһын? Артист булыу өсөн бер урында биш баҫыу кәрәк!” Һәм башҡа, һәм башҡа...



*А.Островский. «Ак канатлы хыялым». Нароков — З.Вәлитов, Громилов — А.Йыһаншин*

Училищела уҡығанда Заһир Суфиян улы бер нәмәне аныҡ тойомлай: һәр ижадсының үҙ йөҙө булырға тейеш. Йәш актер эҙләнә, үҙ юлын табырға тырыша. Йоҡоһоҙ төндәр, эҙләнеүҙәр аша әкренләп ижад серҙәренә төшөнә. Сәнғәт һуҡмағының ауыр икәнен аңлаһа ла, сигенмәй, маҡсатына ынтыла. Ә уның тәрбиәүи серен үҫмер сағында — Йомағужала уҡып йөрөгән йылдарында уҡ һиҙемләгәйне инде ул. Тап ошо мәлдә Ырымбурҙан килгән ниндәйҙер театр М.Фәйзи пьесаһы буйынса ”Аҫылйәр”ҙе ҡуйғайны. Эх, хыялланғайны егет шул саҡта, үҙенең сәхнәлә уйнағанын күреп һаташып бөткәйне. Тик нисек был турала кешегә һөйләргә? Көләсәктәр генә. Аҙаҡ күҙеңде лә астырмаясаҡтар: ”Имеш, берәү артист булған!..” Ә йылдар үтеү менән республикабыҙҙың иң абруйлы театрында тап ошо спектаклдә, Искәндәр бай ролен оҫта башҡарып, тамашасы күңелен әсир итте. Заһир Суфиян улы әле лә хыяллана: ”Шекспирҙың Лирын уйнайһы ине!”. Кем белә, Хоҙайҙың ҡөҙрәте сикһеҙ, уның тарафынан бирелгән талант, шул уҡ ваҡытта бай сәхнә тормошо тәжрибәһе туплаған артистҡа бындай ролдәр тураһында уйланыу тәбиғи күренештер.

Ролдәр, ролдәр... Күптәр улар, күптәр... Күҙ алдымдан сәхнә иңләп Дәрүиш (М.Кәрим. ”Ай тотолған төндә”) үтеп киткәндәй. Аҙымдары киң, ышаныслы. Беҙ белгән Дәрүиш түгел был, бөтөнләй икенсе ҡиәфәттә, күҙҙәре уттай яна. Уны бер уй борсой: Шәфәкте, бары Шәфәкте үҙенеке итеү теләге тынғы бирмәй уға. Быға тиклем мөхәббәт, әҙәмсә йәшәүҙән ваз кисеп, мосафир булып ғүмер һөргән Дәрүиш, ант-вәғәҙәләрен онотторып, бар булмышын биләп алған тойғоға дусар — Шәфәҡкә ғашиҡ. Ғүмерендә тәүге тапҡыр! Юҡ, ул Шәфәҡтән баш тарта алмай!



*Н.Нәжмиҙең «Ҡыңғыраулы дуға» спектакленән күренеш*

Ә Сәғәҙиев?! (А.Абдуллин. ”Ун өсөнсө председатель”). Ул — Дәрүишкә ҡапма-ҡаршы образ. Председатель Сәғәҙиев хужалыҡ итеүҙәге ҡанундарға буйһонмайынса, кеше өсөн яҡшы һәм файҙалы итеп эшләргә тырыша, һөҙөмтәлә, ул етәкләгән колхоз күпкә алға китә. Уның ойоштора белеү талантын район етәкселәре күрә алмай, сөнки ул юғарыла ултырған бюрократтарҙың ысын йөҙөн аса. Ғәйепһеҙгә хөкөм ителеп, дүрт йылға иректән мәхрүм булһа ла, Сәғәҙиев үҙенә хыянат итмәй, маҡсатынан баш тартмай, намыҫына тап төшөрмәй, абруйын юғалтмай.

Ҡапма-ҡаршылыҡлы характерҙағы ошондай образдарҙы бөтә нескәлектәре менән асып биреү оҫталығы Заһир Вәлитовтың киң амплуалы актер булыуы тураһында һөйләй. Тәү ҡарашҡа Заһир ағай һүҙгә һаран, моңһоу ҡарашлы, уйлап, үлсәп кенә һөйләгән кеше кеүек, ул трагик, драматик образдарҙы башҡарыу һәләтенә генә эйә төҫлө. М.Кәримдең ”Ҡыҙ урлау” комедияһында Ирдәүләт роле менән тамашасыларҙы ғына түгел, сәхнәләштәрен дә шаҡ ҡатырғайны. Был актерҙың тәрән психолог булыуын тағы бер раҫлай. Республикабыҙ сәхнәләрендә гөрләп барған ”Йәрем минең — алиһәм” (Раил Байбулатов) әҫәрен сәхнәләштереп, киң фекерләү ҡеүәһенә эйә булыуын тағы бер иҫбатланы олуғ актер.

Үткән быуаттың 80-се йылдарында театр сәхнәһендә барған ”Яҙмыштарҙан уҙмыш бар” спектаклендә Шағир роле өсөн З.Вәлитов Салауат Юлаев премияһына лайыҡ булды. Әҫәрҙең фәлсәфәүи йөкмәткеһен тамашасыға еткереү менән бер рәттән ваҡиғаларҙы тәбиғи бәйләп алып барыу актерҙан ҙур оҫталыҡ талап итә. Был образды ижад иткәндә уға бала сағына — ҡәһәрле һуғыш йылдарына әйләнеп ҡайтыу, ошо дәүер ғазаптарын ҡабаттан кисереү еңел булмағандыр.

Әсәһе Ғилмиә, өләсәһе Хупъямал инәйҙәр ҡулында тәрбиәләнгән үҫмер Заһир атаһын бөтөнләй хәтерләмәй. Ас, яланғас булһа ла, иркенлектә үҫеүе, берҙән, бәхетле тормош тураһында уйҙары, икенсенән, бала саҡ хыялын тормошҡа ашырыу теләге уны Өфөгә алып килә. Хыялын тормошҡа ашыра егет, бәхетен дә таба. Тормош юлдашын — сибәр ҡыҙ Минсәриәне тыуған яғына гастролгә ҡайтҡанда осрата. Иңгә-иң терәшеп бына инде утыҙ һигеҙ йылдан ашыу тормош кисерә улар. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Минсәриә Әсфән ҡыҙы

Башҡорт дәүләт академия драма театрында оҙаҡ йылдар алмаштырғыһыҙ музей мөдире булып эшләй. Унған, тырыш хужабикә, ҡыҙҙары Айгөл менән Айһылыуға хәстәрлекле әсә, ире Заһирға яғымлы ҡатын, яҡын кәңәшсе. Күптәргә өлгө булырлыҡ матур тормош менән йәшәй Вәлитовтар. Быйыл үҙҙәре төҙөгән бынамын тигән ике ҡатлы йорттарын туйларға йыйыналар.

Кеселәргә кеселекле, ололарға ихтирамлы Заһир Вәлитов йәш артистарға һәр ваҡыт ярҙам ҡулын һуҙа, улар менән бергә радиопостановкалар, телевизион инсценировкалар әҙерләй. Теге йәки был образды тыуҙырғанда уларға дөрөҫ йүнәлеш бирә. СССР-ҙың халыҡ артистკаһы Гөлли Мөбәрәкова: "Актер Заһир Вәлитов менән уйнауы еңел, ул партнерҙарҙың ролде тулыраҡ асыуына булышлыҡ итә", — ти.

З.Вәлитов ижад юлы башында атаҡлы сәнғәт эшмәкәрҙәре Рим Сыртланов, Ғабдулла Ғиләжевтарға юлығыуын, уларҙа уҡыу бәхете тейеүен яҙмыш бүләге тип ҡабул итә. Башҡорт дәүләт академия театрына килгәнсе Сибай башҡорт театрында бер-бер артлы матур образдар ижад итеп өлгөрә. Республикабыҙҙың иң абруйлы театры — М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры сәхнәһендә төрлө характерҙағы тиҫтәләрсә образдарҙы кәүҙәләндерә Заһир Суфиян улы. М.Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!"ында — Гефест, "Йәйәүле Мәхмүт"тә — Инсаф Мисбахов, "Ярлыҡау"ҙа — Хомичук, "Йырланмаған йыр"ҙа — Яппар, "Айгөл иле"ндә — Йәғәфәр, Ә.Мирзаһитовтың "Бәхтегәрәй"ендә — Бәхтегәрәй, "Ғүмер ике килмәй"ҙә — Хасбулат, "Утлы өйөрмә"лә — Ильяс, "Әсәләр көтәләр улдарын"да — Яхъя, Т.Таһировтың "Ғәлиә"һендә — Булат, А.Чеховтың "Апалы-һеңлеле өсәү"ендә — Кулыгин, Р.Сафиндың "Ҡыр ҡаҙҙары"нда — Байбулат, "Тилекәй"ендә — Хөсәйен, "Йәнбикә"лә — Тимерғәле, Н.Асанбаевтың "Һыу юлы"нда — Йософ, Ғ.Ҡотойҙың "Тапшырылмаған хаттар"ында — Вәли, Д.Юлтыйҙың "Ҡарағол"онда — Иван Иванович, М.Буранғоловтың "Башҡорт туйы"нда — Йәнгилде, Х.Зариповтың "Эх, кәләше лә кәләше"ндә Өмөтхужа, И.Йомағоловтың "Нәркәс"ендә — Илсеғол, А.Островскийҙың "Аҡ ҡанатлы хыялым"да — Нароков, Эдуардо де Филиппоның "Илай белмәгән ҡатын"ында Доменико Сориано һәм башҡа, бер-береһенә бөтөнләй оҡшамаған, төрлө яҙмыштарҙы сағылдырған образдарҙы башҡарып тамашасыларҙы әсир итте. Ул теге йәки был ролде уйнаны, тип әйтергә тел дә әйләнмәй, Заһир Суфиян улы сәхнәләге кеше яҙмышы менән йәшәй, тетрәнә, ғазаплана, шатлана. Шуға "театрҙа уйнау" тигән төшөнсә уға үтә лә ят. Заһир Вәлитовса, театр сәнғәте — кешене ваҡлыҡтан, бысраҡлыҡтан юғары күтәреүсе, ҡанатландырыусы, матурлыҡҡа әйҙәүсе, инандырыусы, иманға күндереүсе, тәрбиәләүсе төшөнсә. Бала саҡтан сәнғәттең ҡиммәтен аңлаған, хыялына хыянат итмәйсә, үҙ юлынан барыусы, матур образдар тыуҙырып, кеше күңелен байытыусы сәхнә оҫтаһы ул. Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Заһир Суфиян улы Вәлитов яҙмышынан бәхетле.